*Өлфәт ҠОБАҒОШОВ*

# ҠӘҘЕБӘК НАСИР БАТЫР ҺӘМ УНЫҢ ЛЕГЕНДАЛАРЫ

Ҡәҙебәк Насир — данлыҡлы батыр, ҡурайсы-йырсы, халыҡ бәхете, тыуған еренең азатлығы өсөн көрәшкән шәхес. Ҡайһы бер легендаларҙа ул ике кеше, бер юлдан йөрөүсе ике дуҫ — Ҡәҙебәк һәм Насир, ә икенсе легендаларҙа — ике исемдә йөрөүсе бер шәхес булып күренә. Исеменең әйтелеше буйынса ла ул бер ерҙә Ҡәҙебәк йәки Ғәҙебәк, икенсе осраҡта Кәнебәк, йә иһә Көнөбәк булып йөрөй. Урыҫ яҙылышында ул Казыбек һәм Казбек.

Уның төрлө исем менән йөрөүе лә, яҙмышы ла икенсе бер батырға — Буранбай-Йәркәйгә оҡшаған. Йәшәгән ваҡыты менән дә улар кантон идаралығы осорона тура килә. Шулай итеп, әлеге көнгә тиклем Ҡәҙәбәк Насирҙың кем булыуы тураһында аныҡ ҡына мәғлүмәт юҡ. Шуға күрә, уның шәхесенә аҙ ғына булһа ла асыҡлыҡ индереү маҡсатында, легендаларға һәм документтарға күҙ һалайыҡ.

Мөхәмәтшә Буранғоловтың Көйөргәҙе районы Бабалар ауылында Ғиниәт Бикҡужиндан яҙып алған һәм «Кәнебәк Насир йыры» исемендә Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинеты фондында һаҡланған бер вариантында былай тиелгән[1]: «Кәнебәк Боҫман Һыуын Ҡыпсаҡ волосы Ялсы ауылында тыуған. Ата-әсәһенән йәшләй етем ҡалып, Аллабирҙе ауылында апаһында тәрбиәләнгән. Егет ҡорона ингәнсе, ҡурайсы-йырсы булып дан алған. 18 йәшендә көрәшсе-батыр сифатында яҡын-тирәләге ауылдарҙа бер кешене лә алға сығармаған. Юл йөрөгәндә бер таяныс булыр тип, Бикҡол старшина уны үҙенә күсер итеп ала. Ҙур ҡунаҡтар килһә, икенсе түрә — Абдулла кантон Кәнебәкте саҡырып ҡурай уйнатҡан. Бикҡол старшинаны үлтереүҙә ғәйепләп, егетте хөкөмгә тарттыралар.[2] Ләкин Кәнебәк Себерҙән ҡасып ҡайта. Юшатыр, Һайылмыш, Ҡара бәрҙе, Һаҡаҫ, Урҙа, Ир Төбәк һәм Һаҡмар буйында ер биләгән Тимашев, Холодков һәм Рудаль баярҙарының крәҫтиәндәре араһында Насир исеме менән йәшәй. Бер байға йылҡы көтөүсеһе булып яллана. Уға байҙың ҡыҙы ғашиҡ була. Йәштәр ҡасырға ҡарар итә, ләкин бай һиҙеп ҡала һәм Насирҙы йыраҡҡа тибенгә мал көтөргә ебәрә.

Бер ваҡыт бай, малдарына күҙ һалайым тип бара ла һунар итергә тотона, ләкин кеше йәнлеген һуғып алып, туҡмала. Был бәләнән ҡотолайым тип, ул ҡыҙы Айбикәне старшинаға бисәлеккә бирергә, ә Насирҙы тағы һөргөнгә ебәрергә була. Айбикә иһә, әхирәте менән һыу инергә барып, батып ҡуя. Шунан Насир «Томбойоҡло тәрән күл» тигән, ҡайһы яҡта « Ике ҡыҙ» тип йөрөтөлгән көй сығара.

---

[1] М. Буранғолов. «Башҡорт халыҡ йырҙарының тарихы һәм легендалары». Том I. Инв. №49.

[2] Был хаҡта Ғата Сөләймәнов тарафынан 1953 йылда яҙып алынған «Ҡәҙебәк һәм Насир» тигән легендала ла һөйләнелә.

*Ҡара ат менән сыҡтым,*
*Йөрәктәрем янғанға.*
*Тын-тауыш юҡ елеп ҡайтһам,*
*Айбикәләр батҡанға.*

*Ҡушымта:*

*Томбойоҡло тәрән күл,*
*Эсмәлегем булған күл,*
*Айбикәмде тартып алып,*
*Бәхетемде юйған күл.*

*Аҡназарҙың кире аты*
*Ҡойошҡанын һалдырмай.*
*Насир булып мин йәшәмәм*
*Аҡназарҙы яндырмай.*
*Ҡушымта.*
*Ҡара урмандың ҡара ташы*
*Насир ҡараҡ төйәге.*
*Түрәләрҙән үсем алмай*
*Гүргә кермәҫ һөйәгем.*
*Ҡушымта.*

Насир ҡасып Ырымбур яғына китә. Уның артынан эҙләү төшә. Шул йылды Аҡмәсет һуғышы башлана. Насир губернатор Перовскийға бара.

— Ташҡан йөрәгем һыймай, ал мине эскадроныңа, — ти.

Перовский, ни һөнәрең бар, тигәс, үҙенең ҡурайсы-йырсы икәнен әйтә. Перовский йырлатып, ҡурай уйнатып ҡарай һәм янындағы йырсы, ҡурайсылар бик маҡтағас, уны ғәскәренә ала. Бөрйәндән Ишмөхәмәт ҡурайсы менән икеһенә: бер төҫтәге атҡа менегеҙ, үҙемдең янда йөрөрһөгөҙ, тигәс, Насирҙың күңеле йомшап китә лә:

— Янарал, бер һүҙем бар, тыңла әле, — ти.

— Тыңлайым.

— Атам-әсәмдә иркәләнеп үҫмәгәнгәме, әллә ғүмеремдә былай хөрмәт күрмәгәнгәме, һүҙеңә күңелем майҙай ирене, — ти Насир. — Башым күккә етерҙәй булды, йөрәгемә дәрт тулып, өргәндә ҡурайым ярылырҙай көс йыйылды, үҙеңә бер көй уйнайым. Һәм ул «Перовский» көйөн уйнап ебәргән.

Аҡмәсет һуғышында йөрөгәндә Ишмөхәмәт, Ҡәнебәк-Насирҙар «Аҡмәсет», «Һыр» йәки «Өсөнсө әрме» көйө тип өс төрлө исем менән йөрөгән көйҙө сығарған:

*Мендек кенә тауҙың, ай, башына*
*Ҡолан менән болан ауларға.*
*Ата-әсәләр беҙҙе теләй микән,*
*Үлмәһен, тип ҡаты яуҙарҙа.*
*Һыр даръяһын сығып барыр инек,*
*Аҡмәсеткәй тигән ҡалаға.*
*Аттарыбыҙ бик үк талыҡты шул,*
*Азиятски тигән ҡалаға.*
*Һыр дарьякай буйы ай ҡомлоҡтор,*
*Сығабыҙ тиһәк аттар уҡталмай.*
*Перовский майор фарман бирә,*
*Һаман алға тиеп, туҡталмай.*

*Аршин-аршин ғына, ай, аҡ уҡа*
*Перовский майор ең осо.*
*Бары беҙҙең генә башҡорттар шул,*
*Һыр дарьяны сығыр ҙур көсө.*

Һуғыш бөткәс, Перовский Ҡәнебәк-Насирҙы саҡырып алған да:

— Йә, Насир, нимә һорайһың? Ни бүләк бирәйем? — тигән.

— Бүләкте һорап алмайҙар. Уҙған гонаһтарымды юйырлыҡ батырлығым булһа, ғәфү итерһең. Мин Насир түгел. Һин ҡулға алырға тип эҙләткән Кәнебәк. Түрәләрҙең зыяны теймәһә, бушҡа үлтермәҫ инем. Бына һин барыһынан да ҙур. Зарарың теймәгәс, атайымдай күреп һаҡланым бит! — тип, бар гонаһын һөйләп биргән.

Перовский уны ғәфү итеп, ҡулына ҡағыҙ тоттороп, яуҙа йөрөгән атын мендереп ҡайтарып ебәргән. Ҡайтҡас, берәүҙән дә ҡурҡмаған Кәнебәк. Карауанһарай төҙөгәндә еҙнәһе имгәнеп үлеп, апаһы бик ауыр хәлдә йәшәй икән. Карауанһарайҙы һалғанда башҡалар ҙа Абдулла кантон ҡылған ҡылыҡтарҙан бик яфаланған. Кәнебәктең тағы асыуы килгән. Ул кантонға киткән. Барһа, ул ҙур бер мәжлес йыйған икән. Йырсы-ҡурайсы, тип Кәнебәкте ҙурлап ҡаршы алғандар. «Перовский», «Әрме» көйөн уйнатҡандар. Шунан ҡымыҙ эсеп алғас, Кәнебәк Абдулла кантонға:

— Карауанһарайҙы һалғанда ҙур хеҙмәт күрһәткәнһең. Мин киткәндә йылҡыларың дүрт өйөр ине, хәҙер ун өйөр булған. Һиңә лә бер көй сығарайым, — тигән.

Бары ла «Әйҙә лә, әйҙә! тип күтәреп алған. Кәнәбек «Абдулла кантон» көйөн ҡурайҙа уйнаған да аҙаҡ былай тип йырлаған:

*Ахун инең бит заманында*
*Ниңә улай юлың, ай, ташланың?*
*Ырымбурға бара-бара,*
*Түрәләргә таныштың.*
*Ҡулыңдағы таяғыңды*
*Бер ҡылысҡа алыштың...*
*Абдулла ла ахун, ай, бик зирәк,*
*Инәләрҙән ундай тыуыр ҙа*
*бик һирәк.*
*Фарман менән эшкә ҡыуғас,*
*Ир-ат тотто бары көрәк.*
*Йәш-елкенсәк бисәләрҙе*
*Ниңә ҡыуырға кәрәк.*
*Ярты ғына йыллыҡ паспортҡа ла*
*Бер һум аҡса түләргә, ай, кәрәк.*
*Таш ҡаҙырға халыҡты ҡыуып,*
*Алтын миҙал таҡты ул.*
*Раҫ һөйләгән ҡарттарҙы*
*Эт урынына һуҡты ул.*

Был йыры өсөн Абдулла кантон уны губернаторға ошаҡлап, губернаторҙан Кәнебәк-Насирҙы саҡырттырып, ҡабат ул көйҙө уйнамаҫҡа, йырламаҫҡа тип, ҡултамғаһын алдырған.

Быларҙы Кәнебәк-Насир тураһында Бикҡужин һөйләне, — ти Мөхәмәтша Буранғол. — Башҡа материалдар ҙа шул рәүешле Абдулла кантон тураһындағы йыр һәм көйҙәр уның йырсы икәнен күрһәтеп тора.

Ғата Сөләймәнов тарафынан 1953 йылда төҙөлгән һәм Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинеты фондында «Ҡәҙебәк һәм Насир» тип исемләнгән легенда һаҡлана. Унда Аюҡас тигән ҡарттың Юшатыр буйында балыҡ тотоп, йәнлек аулап көн күреүе, ҡатынының бер көн ҡыҙ табыуы, үҫкәс, ҡыҙҙы Аллабирҙе ауылына кейәүгә биреүҙәре, Аюҡастың тағы бер бала табып, Ҡәҙебәк тип исем ҡушыуҙары тасуирлана. Тәүге легендалағы Насир кеүек, Ҡәҙебәк тә, ялланып көтөү көтә, күсер булып йөрөй, юлда байы һыуға батып үлә һәм Ҡәҙебәкте, байын үлтереүҙә ғәйепләп, Себергә оҙаталар. Ләкин егет, ҡасып ҡайтып, Тимашев кеүек баярҙарға ҡаршы һуғышып йөрөй.

— Халыҡҡа старшиналарҙың ялған эштәрен асырға, ер бүлергә килгән кешеләрен ҡыуып ҡайтарырға, тип әйткән егеттәрҙе ауылдарына таратҡан, — ти Ҡәҙебәк.

Тимашев баяр, стражниктар, землемерҙар менән килеп, һабан менән ерҙе йырҙырып, межалар ҡуйып, сәмерғошло бағаналар ултырта башлай.

Ҡәҙебәк, мәмерйәнән сығып, халыҡты ойоштороп, ҡоралландырып, саҡырылмаған ҡунаҡтарҙы пыранзаран килтерә. Тимашев баяр менән старшиналар ҡасып ҡотола, ҡалған стражниктарҙы, землемерҙарҙы туҡмап, ҡуйған бағаналарын алып ташлап бөтөрәләр.

Боланы баҫыу өсөн ҡоралды ғәскәр килеп, бөтә ауылдарҙа тентеү, ҡулға алыуҙар башлана. Кем болала ҡатнашҡан, уның малын тартып алып, йортон яндырыу, ҡатын-ҡыҙҙарын мыҫҡыллауҙар башлана. Халыҡ, йорттарын ташлап, урман-тау араларына ҡаса. Ҡәҙебәкте лә эҙәрләйҙәр. Ғәскәрҙәр уның йәшенеп ятҡан урынын белеп, уратып ала. Тиң булмаған һуғышта күптәр яралана, үлеп ҡала. Аяуһыҙ алыштан һуң Ҡәҙебәк ағас араһынан, һаҙлыҡ аша ҡасып ҡотола. Ҡаҙаҡтар яғына сығып китә ул.

Унда бер аҙ йөрөгәс, кире Юшатыр буйына ҡайта. Бер көндө ил аралап йөрөгәндә, Ҡәҙебәк бер кешегә тап була.

— Ҡустым, сағыл буйлап ни эшләп йөрөйһөң? — тип һорай ул.

— Һунарсының эше билдәле инде. Һунар итеү өсөн төлкө ятҡан урындарҙы ҡарап йөрөйөм.

— Төлкөнө ҡыуыр өсөн йүгерек атың бармы һуң? — тигән Ҡәҙебәк.

— Беҙҙең кеүек кешегә йүгерек ат ҡайҙан булһын инде? Аҡназар бай менән Юламан старшина ҡушыуы буйынса йөрөйөм. Ҡыш көнө аяҡ-юлдыҡ бер нәмә бирмәҫтәрме икән, тием. Малы бар халыҡ бесән саба, минең малым юҡ, утын яғыр өйөм юҡ. Бай менән старшиналарҙың һүҙен тыңламаһаң, үҙең беләһең. Әле Ҡәҙебәк болаһынан һуң тел дә ҡыбырҙатып булмай, — тип һөйләгәс, Ҡәҙебәк ҡыҙыҡһынып, был кешенән һораша башлаған.

— Һинең Аҡназар байың менән Юламан старшинаңдың яҡшы аттары бармы? — тип һораған ул.

— Уларҙың икеһенең дә аттары яҡшы. Бигерәк тә Аҡназар байҙың. Өйөр-өйөр йылҡыларын Насир көтә. Ҡәҙебәк болаһында ҡатнашҡан, тип һөйләйҙәр. Һеҙгә бик кәрәк булһа, ул йылҡының ҡайҙа йөрөгәнен мин беләм, — тигән.

— Бола ҡуптарған кеше ҡайҙа йөрөй? Уны Себергә ебәрмәнеләрме ни? — тип һораған Ҡәҙебәк.

— Ҡәҙебәкте эҙләйҙәр, тик ул ҡаҙаҡ яғына киткән, — тигән ул. — Ә һеҙ кем булаһығыҙ?

— Беҙ Һаҡмар буйынан, уҙғынсылар, — тип яуап биргән Ҡәҙебәк.

Ҡәҙебәк яҡын дуҫтары менән Аҡназар йәйләүенә юл тотҡан. Ат өйөрөн барып тапҡан. Көтөүсе, йылҡыларын өйөрөп, үҙе сырым итергә тип ятыуы булған, Ҡәҙебәк иптәштәре менән уның аяҡ-ҡулын бәйләп тә ҡуйған.

— Көтөүеңдән яҡшы өс ат бирәһең, ат бирмәһәң, йәнеңде бирәһең! — тип уны ҡыҫмаҡҡа алалар.

— Егеттәр, минең көтөүҙән ат алһағыҙ, Аҡназар бай уның өсөн барыбер мине үлтерәсәк. Шулай булғас, ни эш ҡылһағыҙ ҙа, мин һеҙҙең ҡулда, — тип аҙарынған көтөүсе.

— Исемең нисек? — тип һорағас, көтөүсе Ҡәҙебәктең күҙенә ҡарап торған да:

—Ҡәҙебәк ағай, был һин бит. Мин Насир, һинең яҡын дуҫың, — тигәс,

унын ҡулын сисеп, эштең нисек торғанын һораша башлаған.

Насир боланан һуң булған ваҡиғаларҙы бөтәһен дә энәһенән-ебенә тиклем һөйләп биргән. Айбикә менән үҙара мөнәсәбәтен дә аңлатҡан, тик Аҡназар бай ярлы егетте кейәү итеп алмаҫ, тип Ҡәҙебәктән кәңәш һораған. «Айбикә менән бәйләнешеңде өҙмә, эште барышына ҡарап хәл итәрһең, — ти Ҡәҙебәк. — Бүре үҙенең ояһы тирәһендәге малға теймәй, ти ҡарттар. Мин һин көткән өйөрҙән ат алмайым, беҙ икенсе урындан табырбыҙ. Һин бындағы хәлде миңә еткереп тор, бигерәк тә түрәләр, старшиналар тураһында. Беҙҙең ятҡан төйәкте беләһең, шунда булырбыҙ, — тип һүҙ ҡуйышып, хушлашып айырылышҡандар улар.

Айбикә Аҡназар байҙың уртансы бисәһенең ҡыҙы булған. Ул бәләкәй сағында уҡ әбей-һәбейҙәрҙең: «Айбикә оҙон ғүмерле, бәхетле булһын, тиһәң, ярлы кешенең улынан ҡолағын тешләт, ул донъяла унын бәхетенә йәшәр, — тигән кәңәше менән Айбикәнең ҡолағын күрше генә йәшәгән Насирҙан тешләткәндәр.

— Ул әмәлде кешегә фаш итмә, үҫеп ҡыҙ ҡорона еткәс, күҙ күрер әле, — тип, Аҡназар ризалыҡ биргән. Насир егет булып, Айбикә ҡыҙ ҡорона еткәс, Аҡназар ҡарт Насирҙы үҙенә йылҡы көтөргә ала. Ошо арҡала ул Айбикә менән көн дә осраша, ә мөхәбәттәре нығый барған.

Бер көндө Аҡназар Юламан старшинаны ҡунаҡҡа саҡыра. Былар тирмәнән сығып ҡарап торһалар, Айбикә менән Насирҙың көләшә-көләшә бейәләр һауып йөрөгәнен күрәләр.

—Кемдәр улар, бик татыу йөрөп бейә һауалар? — тип һораған старшина.

—Минең ҡыҙым Айбикә шул була инде, ә янында йөрөгәне — көтөүсе малай, — тигән Аҡназар.

—Бәй-бәй, һинең етеп килгән ҡыҙың бар икән дә баһа! Һинең балаҫағанан бәхете юҡ тип, буш хәбәр һөйләгәндәр икән. Берҙән-бер балаң булғас, ундай йолҡоштар менән бейә һауҙырып йөрөтмә. Ҡыҙыңдың бәхете хаҡында уйларға кәрәк, — тип кәңәш биргән старшина.

Бер аҙна үтеүгә Юламан старшина, Айбикәне һоратып, яусы ебәргән. Аҡназар килгән яусыға:

— Мин ҡыҙымды бирергә ҡаршы түгел, тик уны Насирҙан айырырға кәрәк, сөнки бәләкәй саҡта унан ҡыҙҙың ҡолағын тешләткәйнек. Өҫтәүенә, берен-бере яратышалар ҙа булһа кәрәк. Ҡоҙа булышыуҙы көҙгә ҡалдырайыҡ, шуға тиклем Насирҙы бер яҡҡа оҙатып, унан уаз кисербеҙ, — тигән сәләмде әйтеп ҡайтарып ебәргән, ти.

Көҙ еткән. Ҡар яуғансы тип, Аҡназар йылҡыларын ҡышҡы тибенгә ебәреү өсөн Насирҙы Оло Ҡурғаҙы (Көйөргәҙе) буйына ебәргән. Тәүге ҡар төшкәс, һунарға һәм йылҡыларының нисек урынлашҡанын ҡарау өсөн Аҡназар бай Насир янына юл тота.

Китеп барһа, юлын төлкө киҫеп үткәнен күрә лә уны ҡыуып китә. Ҡыуа-ҡыуа төлкөнө арытып һуғып, эйәренең ҡанъяғаһына бәйләп торғанда бер нисә һыбайлы килеп сыға ла:

— Һин һуҡҡан төлкө беҙҙеке, уны ояһынан беҙ ҡыуып сығарҙыҡ, — тип Аҡназарҙың ҡулынан тартып ала. Төлкө өсөн һуғыш китә. Килгән кешеләр Аҡназарҙы бик ҡаты туҡмап ташлай.

Йылҡы көтөп йөрөгән Насир, тау башына менеп тирә-яҡты ҡарап торғанда, тау аҫтында йөрөгән эйәрле атты күреп, сабып килһә, ат янында Аҡназарҙың ҡысҡырып ятҡанын күрә.

— Тиҙерәк мине ауылға алып ҡайт, үләм, — тип әйткәс, Насир уны атына менгәштереп алып китмәксе була.

— Мин ул көйөнсә бара алмайым, сауылдан һөйрәтке яһап, шуға һалып алып кит, — тигәс, Насир уныңса эшләп, Аҡназарҙы ауылға алып барып ташлаған да, хушлашып, кире йылҡылар янына киткән.

Аҡназар, аяғын рәтләп бәйләгәс, ауылдағы старостаны саҡыртып алған да:

— Мине үҙемдең көтөүсем туҡмап, аяғымды һындырҙы. Хәҙер уның өҫтөнән акт төҙөгөҙ, — тип әйткән ти.

Насирҙы, Аҡназар байҙы туҡмауҙа ғәйепләп, аяҡ-ҡулын бәйләп, Ырымбурға оҙатҡандар.

Айбикәне Юламан старшинаға кейәүгә биреп туй үткәргәндәр. Айбикә иһә Насирҙың ни өсөн атаһын туҡмағанын белә алмай йөҙәгән, шикләнгән, уны уйлап һарғайған.

Насирҙы Ырымбурҙа оҙаҡ тотмайынса Себергә оҙатҡандар. Йылайыр урамдарын уҙған саҡта Насир ҡаса. Ул, Юшатыр буйына килеп, Ҡәҙебәкте эҙләй башлай. Ошо ваҡытта Насир Айбикәне Юламан старшинаға көсләп кейәүгә биргәндәрен ишетә. Күп эҙләп йөрөй торғас, Ҡәҙебәкте урман араһында йәшәгән ерҙән барып таба һәм үҙ башынан үткәндәрҙе һөйләп бирә.

Айбикәне старшина ҡулынан тартып алыу өсөн туранан-тура баҫым яһаһаҡ, үҙебеҙҙе һәләк итербеҙ, — тип, хәйлә уйлап табалар.

Ҡәҙебәктең ҡыҙы: «Йәйләүҙән-йәйләүгә йөрөп орсоҡ иләп, йөн тетеп, балаҫ һуғып, тамаҡ туйҙырып йөрөйөм, эшегеҙ булһа, эшләргә килдем», — тип, Аҡназар йәйләүенә килгән. «Йөн иләрһең, бейәләрҙе ҡороҡларһың», — тип, ҡыҙҙы эшкә алғандар. Бер-ике көн ҡыҙ баш эйеп эшләй. Күп тә үтмәй, Айбикә менән әшнә булып, бергә бейә һауырға сыға. Ҡыҙ шунда ни өсөн килгәнен аңлатып бирә. Нисек ҡасып китергә белмәй йөрөгән Айбикәгә бик уңай тура килә был.

Өсөнсө көн кискә табан Айбикә менән был ҡыҙ бейә һауғандар ҙа, һыу инергә тип, йылға буйына төшәләр.

Кис еткән. Айбикә менән ҡыҙ һаман ҡайтмағас, уларҙы һыу буйынан эҙләгәндәр, ләкин тапмағандар. Аҡназар йәйләүендә ғауға ҡупҡан: «Ҡыҙҙар юғалды!» Был хәлде Юламан старшинаға хәбәр иткәндәр. Ул, үрәтниктәр менән килеп, бөтә һаҙлыҡты, йәйләү араларын йөрөп эҙләп ҡарай — тапмайҙар. Ахырҙа: «Моғайын Насир урлап алып киткәндер», — тип, тау, урман араларынан байҡай башлағандар.

Ә Айбикә, Насир, Ҡәҙебәк бисәһе һәм ҡыҙы менән урман, тауҙар араһында урынлашып, донъя көтә башлағандар, ти.

Бер көн Ҡәҙебәк менән Насир тирәяҡты ҡарап килергә, йәнлек өсөн ҡуйған ауҙарын тикшерергә тип, сығып китәләр. Ә Айбикә менән Ҡәҙебәктең ҡыҙы тау аҫтындағы күлгә һыу инергә тип китә. Ҡыҙҙар, кеше булмауҙан файҙаланып, иркенләп күлдең бер яғынан икенсе яғына йөҙөп һыу ингән саҡта, уларҙы тау башынан күреп ҡалалар. Юламан старшина үрәтниктәре менән күлде ураталар. ... Ҡыҙҙар күлдән сыҡмайынса батып үлә. Быны күреп торған Юламан старшина: «Былары һыу төбөндә дөмөктө, тегеләрен барып тотайыҡ», — тип, Ҡәҙебәк менән Насирҙы эҙләп киткәндәр. Тауҙан-тауға саба торғас: «Ул ҡасҡылар күмәк булып, беҙҙе һәләк итеп ҡуйыуҙары бар, хәҙер эҙҙәрен белдек, ҙурыраҡ отряд менән килербеҙ», — тип, үҙ йәйләүҙәренә ҡайтып киткәндәр.

Насир, Ҡәҙебәк, уның ҡатыны килеп, ҡыҙҙарҙы күл төбөнән табып, күл ситендәге тау битенә ерләгәндәр. «Һыуға батып үлгән ике ҡыҙ», — тип, баш осондағы ташҡа яҙып ҡуйғандар.

Айбикәләрҙең үлеменә өс көн тулыуға Юламан старшина ҡоралланған көслө отряд менән күлгә кире килә. Ҡыҙҙарҙың ҡәберлектәрен күреп: «Улар бында яҡында булырға тейеш», — тип, урманды һөҙә башлағандар. Тау башынан уларҙы күҙәтеп торған Ҡәҙебәк менән Насир, әйберҙәрен алып, шыр урман эсенә инеп ҡасҡан.

Айбикәнең үлеменә бер ай тулғас Насир ҡәберлеккә килгән. Күрә: ҡәберлек тигеҙләнгән, баш остарында ултыртҡан таш ватылған-емерелгән. Насир, ҡыҙҙарҙың ҡәберлеген яңынан рәтләп, баш остарына таш ултыртып, яҙыу яҙып, үкһеп-үкһеп илаған да түбәндәге йырҙы йырлаған:

*Елбер-елбер ел иҫкәндә,*
*Тулкынлайҙыр тәрән күл.*
*Оҙон кара сәскәйҙәре*
*Айбикәне һәләк иткән шул.*
*Томбойокло тәрән күл,*
*Тулы була ташканда.*
*Бигерәк матур, йәмле була*
*Ак сәскәһе атканда.*
*Ҡара ат менеп илгә сыктым,*
*Йөрәктәрем ташканға.*
*Тын тауыш юк елеп кайтһам,*
*Айбикәләр батканға.*
*Томбойокло тәрән күл,*
*Ташып кырға акмайҙыр,*
*Һары сайындай һылыуҙарҙы*
*Кыҙғанмайса ашайҙыр.*
*Йылкы көттөм байҙарға*
*Күрә алмайым тайҙар ҙа.*
*Нахак бәләләр яҙылғас,*
*Мин булманым кайҙарҙа.*
*Томбойокло тәрән күл,*
*Эсмәлегем булған күл.*
*Айбикәне тартып алғас,*
*Бәхетемде юйған күл.*
*Юламандың йылкыһы,*
*Кола саптар күбеһе.*
*Айбикәнең батканын*
*Күрмәгән бит береһе.*
*Томбойокло тәрән күл,*
*Бер ай торҙом буйында.*
*Айбикәне минән алыу,*
*Булған икән уйында.*
*Акназарҙың кире аты,*
*Койошканын һалдырмай.*
*Насир булып мин йәшәмәм*
*Акназарҙы яндырмай.*
*Томбойокло тәрән күл,*
*Буйын ағас ураткан.*
*Һыуға төшкән ике кыҙҙы*
*Юламандар ураткан.*
*Ҡара урмандың кара ташы*
*Насир карак төйәге.*
*Түрәләрҙән үсен алмай,*
*Гүргә инмәҫ һөйәге.*
*Ай ике кыҙ, ике кыҙ —*
*Тәрән күлдең биҙәге.*
*Ҡыҙҙар ғына түгел унда*
*Ҡалды Насир йөрәге.*

Ошо көй, ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа, ҡурайсынан-ҡурайсыға ишетелеп, халыҡ араһында таралған.

Ҡәҙебәк менән Насир, юлдарын йәшереп, бер нисә ай Бөрйән яғында йөрөгәндән һуң, Туғыҙтимер һәм Яман Юшатыр буйына ҡайтып йәшенеп йәшәйҙәр. Алмалы ауылынан Тимашев байҙың крәҫтиәндәре менән бәйләнеш тоталар. Уларҙың бик ыҙа сигеп йәшәгәндәрен күреп, халыҡты был ауыр хәлдән ҡотҡарыу юлын эҙләйҙәр. Тимаш байҙың улы Николай Өфөләге мөфтөй ҡыҙына күҙе төшөп, уны кәләш итеп алыу өсөн, атаһынан рөхсәт һораған. Тимаш бай быға риза булмаған. Николай, бик ғәрләнеп, ҡыҙҙы урлатып алмаҡсы була һәм кем дә кем мөфтөй ҡыҙын урлап килтерә, шул егеттең ауылына тулы хоҡуҡ бирәм, тигән хәбәр тарата. Был хәбәрҙе Ҡәҙебәк менән Насирға еткергәндәр. Улар, вәғәҙәгә ышанып, ҡыҙҙы урлап, Николайға килтереп тапшыра. Алмалы ауылы крәҫтиәндәре лә иреклек ала. Тимаш бай килеп, улын пыр туҙҙыра һәм ҡыҙҙы кем урлап алып килтергәнен асыҡларға тотона. Ләкин эштең осона сыға алмай. Алмалы ауылынан Садиҡ исемле һатлыҡ йән:

— Был Насир менән Ҡәҙебәктең эше булырға тейеш. Улар ошо тирәлә йөрөй ине, — ти байға.

Шымсылар Насир менән Ҡәҙебәкте эҙәрләргә тотонған. Юламан старшина Бикҡол ауылынан Мәжиткә, Алмалы ауылынан Садиҡҡа Ҡәҙебәк менән Насирҙы эҙләргә ҡушҡан. Бер аҙна эҙләгәндән һуң уларҙың Алмалы ауылы крәҫтиәндәре араһында йөрөгәнлектәрен белеп, старшинаға хәбәр иткәндәр. Ҡәҙебәк менән Насирҙы тотоп, Ырымбурға ебәрергә булғандар. Китер алдынан Ҡәҙебәк менән Насир халыҡҡа былай тип йыр менән мөрәжәғәт иткәндәр:

*Ҡәҙебәк тә менән ай Насирҙың*
*Менәр атҡайҙары кирме ине?*
*Ышанғандай ирҙәр, ай, тотмаһа*
*Себерҙәргә китер ирме ине?*
*Тимашау ҙа баяр, ай, ерҙәре —*
*Көйөргәҙе һыуы буйында.*
*Ҡәҙебәк, Насирҙарҙы тотоу өсөн,*
*Ҡыҙғанманы баяр малын да.*
*Ҡәҙебәк, Насир себер китә тип ҡк,*
*Инде баярҙарҙың йәне тыныр.*
*Баярығыҙға әйтегеҙ, ҡыуанмаһын,*
*Беҙҙән яманыраҡ ир тыуыр!*
*Саптар менән генә ҡара туры —*
*Беҙгә еккән баяр аттары.*
*Ҡәҙебәк, Насир себер китеү менән,*
*Тыныс ятмаҫ баярҙың утары.*
*Көмөш тә генә эйәр ҡуйһыҙ һалһам,*
*Ат муйынҡайына тейерме?*
*Ир-егетҡәйҙәрҙең, ай, ҡәҙерен*
*Ил белмәһә, баярҙар белерме!?*
*Алыҫтарҙан ҡүгәреп, ай, ҡүренгән*
*Аҡ бейекҡәйҙәрҙең баштары.*
*Ҡәҙебәк тә, Насир йөрөгән саҡта*
*Ҡуянтубыҡ булды аштары.*
*Илебеҙгә ҡайтып ҡлеп ҡалһаҡ,*
*Баш особоҙға таштар ҡуйығыҙ!*
*Хәтере ҡалған беҙгә кеше булһа,*
*Бәхил булып барын юйығыҙ.*

Ҡәҙебәк менән Насирҙы Имәнғол ауылына Юламан старшинаға килтергән булғандар. Былар килгәс, ауыл халҡы уларҙы күреп, хушлашып ҡалыу өсөн йыйылған. Шунда улар халыҡтан ҡымыҙ һорап алып эскәндәр ҙә былай тип йырлағандар:

*Ҡәҙебәк тә менән Насир ҡараҡ*
*Рәхәт ҡүрмәй, ташта ҡүп ятты.*
*Бер генә лә гонаһ ҡылмай тороп*
*Бикҡол Мәжите беҙҙе утҡа атты.*
*Ҡәҙебәк, Насир себер китеү менән*
*Байырмы иҡән Бикҡол байҙары?*
*Беҙҙең ҡондо Мәжит һинән алыр,*
*Алмалы ла Ихсан улдары.*
*Иҫән генә булһаҡ беҙ ҡайтырбыҙ,*
*Себер юлы беҙгә ят түгел.*
*Малын түгел, йәнен беҙ алырбыҙ,*
*Мәжит илгә барнау[3] ир түгел!*

Ҡәҙебәк менән Насир Себерҙә бер нисә йыл ғүмер итә. Улар унда ла тик ятмай. Үҙҙәре тирәһенә кешеләр туплап, ҡасып ҡайтыу яғын эҙләйҙәр. Бер көн быларҙы эшкә алып киткәндә, бөтә кеше бер булып, һаҡсыларын үлтереп, уларҙың ҡоралдарын алып ҡаса.

Ҡәҙәбек менән Насир, Себерҙән ҡайтып килеп, Бикҡол ауылы байҙарының аттарын алып китеп һата. Шул уҡ ваҡытта Тимашев крәҫтиәндәре араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙыралар. Юламан старшина менән Аҡназар байҙы үлтереп, Юшатыр йылғаһынан ағыҙып ебәрәләр. Тимаш бай крәҫтиәндәр өҫтөнән шымсы итеп ҡуйған һатлыҡ йәндәрҙе үлтереп, крәҫтиәндәрҙе байҙарға ҡаршы өндәйҙәр.

Был хәл Ырымбур губернаторына барып ишетелә. Бола башлап йөрөүсенең юлына төшмәксе булып, ул Семенов етәкселегендә атлы ғәскәр ебәрә.

Тимашев баяр Семенов менән берлектә ауылдағы муллаларҙы, байҙарҙы һәм старшиналарҙы йыйып, кәңәш ҡора. Шунда Ҡәҙебәк менән Насирҙың тағы ла Себерҙән ҡасып ҡайтыу хәбәрен ишетәләр.

— Ҡәҙебәк менән Насирҙы тотоп йәки үлтереп, баштарын миңә килтер-

[3] Барнау — дан тоҡҡан.

мәһәгеҙ, минең менән килгән отряд һеҙҙең иҫәпкә ашап, кейенеп, бола баҫылғансы бында ятасаҡ! — тигән Семенов.

Бынан һуң бөтә ерҙә Ҡәҙебәк менән Насирҙы әҙерләү башлана. Был хәлде Ҡәҙебәктәргә еткерәләр. Ҡәҙебәк менән Насир икәү-ара һөйләшәләр ҙә халыҡты был бәләнән ҡотҡарыу өсөн эшкә керешәләр.

Бикҡол ауылына барып, Мәжитте, Алмалы ауылынан Садиҡты тотоп, урманға алып барып үлтерәләр, баштарын тоҡҡа һалып, үҙҙәре уларҙың кейемдәрен кейеп, ә үҙ кейемдәрен шымсыларға кейҙереп, кәүҙәләрен ат ҡойроғона бәйләп, Тимашев бай менән Семенов эсеп ултырған саҡта барып керәләр ҙә: «Бына һеҙгә Ҡәҙебәк менән Насирҙың баштары! Кәүҙәләре ат ҡойроғонда, сығып ҡарағыҙ!» — тиҙәр.

Ҡәҙебәк менән Насирҙың һүҙҙәренә Тимаш бай ҙа, Семенов та ышана, бүләккә аҡса биреп, үлектәрҙе кеше күрмәһен, ҡайҙа теләйһегеҙ, шунда күмегеҙ, тип сығарып ебәрәләр.

Бер ай самаһы ваҡыт үткәс, Ҡәҙебәк менән Насирҙың ҡылған эштәре фашлана. Уларҙы тотоу өсөн айырым ҡырғын отряды килеп төшә. Ҡәҙебәктәр һуңғы һулышҡа тиклем һуғышҡан. Ошо алышта Насир яраланып үлә. Ҡәҙебәкте, яраланған килеш тотоп алып, бик ҡаты туҡмайҙар. Ырымбурға алып китеп барғанда ул да үлә.

« Ҡәҙебәк менән Насирҙың йырҙары халыҡ араһында киң таралған булған. Уларҙы йыш иҫкә алып йырлағандар. Шуның өсөн ул көйҙө «Ҡәҙебәк һәм Насир көйө» тип йөрөтәләр, — тип һөйләне хәҙерге Баймаҡ районынан Кәримов Әхмәҙулла, ҡурайсы-артист Ғиниәт Ушанов һәм Басай ауылынан Диәров Кәрим», — тип яҙа Ғата Сөләймәнов.

Был шәхесте асыҡлау маҡсатында Ғата Сөләймәнов легенданы һөйләүселәрҙән һорашҡас, шуларҙы яҙа: «Баймаҡ районы 2-се Төрөкмән ауылынан Үтәрбаев Ғиниәт ҡурайсы:

«Ҡәҙебәк —ысын исеме, ә Насир — ялған исеме», — тип һөйләне. Ушанов иһә: улар айырым кешеләр, бик яҡын дуҫтар булғандар, һуңғы көндәренә тиклем бергә йөрөгәндәр, — тип, Үтәрбаев һөйләгәнгә ҡаршы төштө. Кәримов менән Дияровтар ҙа Ушановтың һөйләүен дөрөҫләне.

Унан һуң Дияров та, Кәримов та Ҡәҙебәктең исемен «Кәнебәк», ти. Был исемде дөрөҫләү өсөн тыуған районы Көйөргәҙе булған яҙыусы Баязит Бикбайҙан һораным. Ул: «Ҡәҙебәк», тине. Шуға күрә мин Ҡәҙебәк тип яҙҙым».

Мөхәмәтша Буранғолдоң Көйөргәҙе районы, элекке Ҡыпсаҡ Ете ырыу кантоны Бабалар ауылынан шул уҡ Ғиниәт Бикҡужиндан яҙып алған тағы бер легенданан өҙөк килтерәйек.

« ... Беҙҙең Юшатыр, Һайылмыш йылғаларының башы булған Аҡбейек тауының бер сағылын «Йәркәй сағылы» тип йөрөтәләр. Олатайҙар һөйләүе буйынса, Тимашев баяр башҡорттарҙың ерен тартып алып, крәҫтиәндәрен килтереп ултыртҡан осорҙа Йәркәй баяр старшиналарға ҡаршы халыҡты ҡуҙғатҡан. Баяр, казактар килтереп, боланы баҫтырған. Йәркәйҙең шул Аҡбейек тирәһендә ҡасып йөрөгәнен белгән дә, Бикҡол старшинаһын саҡырып:

—Йәркәйҙе тоторҙай кеше тап, үҙеңә лә, Йәркәйҙе тотҡан кешегә лә ҙур бүләк бирәсәкмен, — тигән.

Бикҡол, старшинаның күсере Көнебәк йырсы, ҡурайсы Йәркәйҙең бик яҡын дуҫы булған. Ул Бикҡол старшинаның серен Йәркәйгә белдергән. Йәркәйҙең Көнебәктән бүтән дә Туғыҙтимер Алмалы ауылы крәҫтиәндәре һәм башҡорттар араһында дуҫ-ише булған. Иптәш-алғыштары менән кәңәш иткәндән һуң, Йәркәй, исемен алмаштырып, крәҫтиәндәр араһында Хажғәли исеме менән йөрөгән. Шул исем менән баярға урман ҡараусы булып эшкә ингән. Ул ҡарай башлағас, баярҙың урманында урман ҡырҡыу, малы юғалыу туҡтаған. Баяр ҙа ышаныс менән ҡарай башлаған. Бер көн саҡырып алып, былай тигән:

—Хажғәле, Йәркәйҙе тотор кеше тап, ни теләһәң шуны бирәм.

—Алмалы, Туғыҙтимер крәҫтиәндәре араһында уны тоторҙай егеттәр бар. Тик улар үҙҙәрен азат итеүҙе һорайҙар, — тигән Йәркәй.

—Үҙҙәрен генә түгел, ауылдарын азат итәм. Губернатор: нимә эшләһәң дә эшлә, Йәркәйҙе тоттор, тип, миңә йөкмәтте, — тигән баяр.

Йәркәй егеттәре менән кәңәш иткән дә, бөтә крәҫтиәндәрҙең һәм Йәркәйҙең тәкәтен ҡоротҡан Бикҡол старшинаһын үлтереп, Йәркәйҙең ҡыуышына илтеп һалырға булған.

Йәркәй, Көнебәк менән һөйләшеп, Бикҡол старшинаның Ырымбурға сығыр көндө аңдып торғандар ҙа, юлда үлтергәндәр. Төндә бөтә кеше йоҡоға талғас, төн урталарында Ҡарғалыға килгәндәр ҙә: «Аттар өркөп, старшина һыуға осто! Тиҙ булығыҙ, ярҙамға барығыҙ!» — тип хәбәр һалғандар. Халыҡ старшинаны эҙләргә килгәндә, Көнебәк

арбаһы менән аттарҙы һыуға йөҙҙөрөп, үҙе һыуға мансылып, паром янында торған. Кәмә-маҙар менән төшөп, һыу төбөн һәрмәштереп ҡараһалар ҙа, түңкәрелеп төшкән арбаһын да таба алмағандар.

— Яҙғы ташҡында ниңә хәбәр итмәй, яңғыҙ паромды ҡуҙғатаһың? — тип, Көнебәкте ябып ҡуйһалар ҙа, бер нисә көндән сығарғандар.

Старшина ғауғаһы баҫылғансы, Көнебәк ябылған еренән сыҡҡансы, Йәркәй менән иптәштәре Бикҡол старшинаның кәүҙәһен, еҫләнеп китмәһен тип, үҙәктәрҙә иреп бөтмәй ятҡан ҡар өҫтөнә күсергән. Бикҡол старшинаның битен-күҙен танымаҫлыҡ төҫкә индереп, Йәркәйҙеке һымаҡ ҡаҫҡын кейемен кейендереп, янына Йәркәй тип раҫларлыҡ ҡағыҙ, бүтән нәмәләр һалғандар ҙа, Йәркәй, баярға инеп:

— Йәркәйҙе осраттым, тик, господин, тереләй тотоп алып килә алманым, үлтерҙем. Нишләтәйем? Алып ҡайтайыммы? Әллә барып ҡына күрәһеңме? — тигән.

Баяр:

— Бер үҙең үлтерҙеңме? — тигән.

Йәркәй:

— Үлтерерһең бер үҙең! Кеше малын урлап ашап һимереп йөрөгән кешегә көс етәме? Алмалы, Туғыҙтимер ауылы егеттәре менән өс-дүрт кешегә тереләй бирелмәне, — тигән.

Баяр:

— Ярар, һиңә ышанам, һүҙемдә торам. Алмалы менән Туғыҙтимерҙе азат итәм. Тик Йәркәйҙең үлгәнен бер кемгә лә әйтмәгеҙ. Мин үлтерткән тип, халыҡ ҡауға ҡуптарыр, — тигән.

Бер аҙ ваҡыт уҙғас, Бикҡол старшинаның эше асыла. Көнебәк менән Йәркәй ҡасып ҡотола. Йәркәй, Хажғәли исемен ташлап, Буранбай исемендә, Көнебәк— Насир исемендә йөрөй башлайҙар...

Ә хәҙер Ырымбур өлкәһенең Төйләгән районы Аллабирҙе ауылында уҡытыусы-пенсионер Хәбибйән Баяновтан Ф.Абдуллин яҙып алған варианттан өҙөк килтерәйек:

« ... Ошо осорҙа Аллабирҙе ауылында Хужбәков Насир тигән кеше йәшәгән. Ул заманына күрә ярайһы уҡ уҡымышлы булған. Рус телен дә белгән. Көс яғына килгәндә, уға тиң кеше булмаған. Һабантуйҙарҙа күрше-тирәләге батырҙарға бил бирмәгән. Йырға ла оҫта булған...

Бер көндө Насир, иптәштәре менән баяр утарына килеп, Тимашевтың бик шәп айғырын урлай. Быны берәү ҙә тоймай ҡала. Иртәгәһен ҡараһалар, йөҙәҡ үҙ урынында, ишек тә бөтөн, ә айғыр юҡ.

Тимашев, айғырын эҙләтеп, тирәяҡтағы ауылдарҙы аяҡҡа баҫтыра. Был хәл Насирҙы тағы ла ярһыта төшә. Айғыр ғауғаһы баҫылып та өлгөрмәй, Насирҙың егеттәре баярҙың малын туҙҙыра, утарына ут һала. Тимашев Ырымбурҙан ҡоралды отряд саҡырта. Күбә һымаҡ күпереп торған погонлы түрәләр килеп Хажбәков Насирҙы ҡулға алалар. Бығаулап алып сығып китәләр... Ауылды сыҡҡас та Туғыҙҡыр тигән ер башлана, шунда Хужбәковтар иген иккән. Ошо урындан уҙған саҡта Насир киң ҡырҙарға күҙ ташлап ала ла тағы бер йырлай:

*Туғыҙҡыркайҙарҙан үткән саҡта*
*Күренәләр Юшатыр туғайы.*
*Минең дә генә былай булыуымды*
*Беләме икән Хисам туғаным?*

Хисам—Насирҙың бер туған ҡустыһы була. Ағаһын Себергә һөргөнгә алып киткәндә ул өйҙә булмай, ҡайҙалыр ситтә йөрөп ҡала.

Хажбәков Насир һөргөнгә оҙатылғас та, баяр тынысланa алмай. Юҡ-юҡ та, утарҙан малы юғала бының, урманы ҡырҡыла, кәртә-ҡуралары көлгә әйләнә. Йәйге төндәрҙә Юшатыр туғайында Насир сығарған көйгә йыр яңғырай:

*Ғәҙебәк Насир менгән ҡара юрға*
*Маңлай сәскәйҙәрен йыя алмай.*
*Ғәҙебәк Насир яуап биргән саҡта,*
*Губернатор-майор түҙә алмай.*
*Өҫтәл өҫкәйҙәре, ай, көрәгә,*
*Өҫтәл аҫкайҙары күләгә.*
*Ҡуш аяҡкайҙарын тиңдәр баҫып,*
*Яуап бирә Насир түрәгә.*
*Юшатыркай ҡырының буйҙарында*
*Йәйрәп ята баяр ерҙәре,*
*Ғәҙебәк Насир Себер китте тиеп,*
*Тынырмы икән ауылдың ирҙәре...»*

Хәҙер ревизия материалдарына күсәйек. 1834 йылғы ревизия буйынса, 9-сы башҡорт кантоны 29-сы йортҡа ҡараған Аллабирҙе ауылында барлығы 65 ғаилә булып 210 ир һәм 201 ҡатын-ҡыҙ теркәлгән. Иң тәүге 1-се һан менән йортауай йөҙ башы Ғәҙебәк Илсебаев (1766 йылғы) тора. Уға ул саҡта 62 йәш булған. Өлкән улы Хисаметдин (1796 йылғы), уға 38 йәш һәм Хисаметдиндең улы Абдулғани (1816 йылғы), уға 18 йәш. Ғәҙебәктең ҡатыны Кискесолтанға — 50 йәш һәм ҡыҙҙары Алмабикәгә — 13, Мәрхүбәгә — 4 йәш була. Хисаметдиндең беренсе ҡатыны Нәзифә — 38 йәш, икенсеһе Хәнифә — 37 йәш. Тәүге ҡатынынан Фатима тигән 4 йәшлек һәм Ғәйшә тигән 2 йәшлек ҡыҙы — барлығы 10

кеше бер ғаилә булып ғүмер иткәндәр. 2-се һан менән Абдулнасир Ҡаҙыбәков (1799 йылғы) ғаиләһе теркәлгән. Уға ул саҡта 35 йәш булған. Ике ҡатынынан, Һылыубикәгә — 30 йәш һәм Йәмилә — 25 йәш, 7 улы булған. Улар ошо тәртип менән теркәлгәндәр:

1. Мөхәмәтзаман — 10 йәш.
2. Нәҙерша — 4 йәш.
3. Абдулназар (1804—1820)
4. Абдуляпар (1812—1821)
5. Ғәлиәкбәр — 18 йәш.
6. Шәйхлислам — 12 йәш.
7. Мөхәмәтрәхим — 1 йәш.

(БРҮДТА Ф.И.-138. Оп.2.Д.430)

Күренеүенсә, Абдулназар һәм Абдуляпар, йәштәре буйынса Насирҙың үҙ улдары түгел. Улар, бәлки, Насирҙың тәүҙә оло ҡатыны булып, уның эйәрсән улдары булыуы мөмкин. Йә булмаһа, етем балаларҙы уллыҡҡа алғандыр. Ошо материалдарға таянып, шәхесте асыҡлап ҡарайыҡ: Ҡәҙебәк Насир Караунһарайҙы төҙөүҙә һәм Перовскийҙың Хиуа походында ҡатнаша. Был 1839 йылда була. Насирға ул саҡта 40 йәш, ә атаһы Ҡәҙебәккә 67 йәш булған. Тимәк, унда ҡатнашыусы — Насир Ҡәҙебәков. Легенданан күренеүенсә, Хисам Насирҙың бер туған ҡустыһы, ә йырҙағы текст буйынса, Хисам туғаным, тип өндәшә Насир. Туғаным тип ағай, эне кешегә лә өндәшәләр. Хисам — документ буйынса Насирҙан 3 йәшкә оло бер туған ағаһы. Был осраҡта ла Насир (Хажебәков) Ҡәҙебәков дөрөҫкә тап килә.

Насирҙың Ҡәҙебәк булып та йөрөүен былай аңлатырға булыр ине. Беренсенән, Ҡәҙебәк — Насирҙың атаһының исеме, Насирҙың фамилияһы. Фамилияны ялғауһыҙ көйө исем итеп йөрөү — таралған күренеш. Икенсенән, Насир атаһына төҫ-ҡиәфәте менән дә ныҡ оҡшаған булғандыр. Әгәр ҙә атаһын бер аҙ төҫмөрләгән кеше булһа, үҙенең ысын исемен йәшереп, ваҡытлыса атаһының исемен ҡулланыуы ла бик ихтимал, сөнки атаһы —танылған йөҙ башы. Был осраҡта, әлбиттә, атай кеше байтаҡҡа оло булһа ла, «ҡараҡ» булып йөрөгән кеше күпкә өлкәнерәк күренеүе лә бар. Ҡәҙебәк менән Насирҙың легендаларҙа ике кеше булып йөрөүен нисек аңларға? Беренсенән, уның кеүек йылғыр кеше бер үк ваҡытта ике кеше ҡылған эште башҡарыуы бик мөмкин. Икенсенән, ул бер үҙе булмаған, уның көрәштәштәре күп булған, шул уҡ Йәркәй. Ҡайһы бер осраҡта уларҙың да был исемде файҙаланыуы ихтимал. Өсөнсөнән, легенданан күренеүенсә, Ҡәҙебәктең атаһы Аюҡас. Ҡәҙебәк үкһеҙ етем ҡалып Аллабирҙе ауылында апаһы ҡарамағанда тәрбиәләнә. Документта Ҡәҙебәк Илсебаев булып күренә. Илсебай — уның апаһының ире, еҙнәһеләр, бәлки. Нисек кенә булмаһын, Ҡәҙебәк йәш сағында изге көрәш юлында йөрөүе ихтимал. Сөнки, бар легендаларҙа ла был герой тәүҙә Ҡәҙебәк булып йөрөй, аҙаҡ ысын исемен йәшереп, Насир исеменә күсә йәки Насир тигән икенсе бер көрәштәш дуҫын осрата. Ҡәҙебәк ошо ялған Насир исемендә йөрөп, йә булмаһа уның яҡын көрәштәше шул исемдә булып, аҙаҡ үҙенең улы тыуғас, дуҫы иҫтәлегенә Насир тип исем ҡушҡандыр. Атанан күргән — уҡ юнған, тигәндәй, Насир ҙа ата юлын ҡыуғандыр.

Тағы ла бер иҫтәлеккә туҡталмайынса булмай:

« ... 1855 йыл мин Иманғолда уҡып йөрөгәндә оло ағайым Низаметдин Абдулла кантон Дәүләтшиндә писарь булып хеҙмәт иткәндә, мин ағайым янына канцелярияға барғайным, — тип яҙа Яҡшембәт ауылынан Байтүрә Хоҙайназар улы Сәлтәшев 1907 йылда 20 мартта яҙған иҫтәлегендә. Һәм унда ул Ҡаһарман кантондың Ырымбурға губернатор саҡырыуы буйынса китеп барышлай Абдулла кантон Дәүләтшинға һуғылып, үҙ-ара шаулашҡаны, талашҡаны тураһында әйтә. — Талаштың сәбәбен ағайымдан белдем, — ти Байтүрә Сәлтәшев. Ҡаһарман кантон Себерҙән ҡасҡан Буранбайҙы — Шаһибәрәков, Ҡәнебәкте — Насир исеме менән йәшереп аҫырай, тип Дәүләтшин кантон ошаҡлаған, шуның өсөн Ҡаһарман кантонды губернатор саҡырған икән ...» [4] — тип яҙып ҡалдырған автор.

Был иҫтәлектә яҙылыуынса ла, Ҡәҙебәк Насир бер кеше булып күренә һәм ул саҡта был батырҙар иҫән-аман булған.

Тимәк, Ҡәҙебәк Насир — бер кеше. Уның исеме, ул эшләгән батырлыҡтар, ул тыуҙырған йырҙар, легендалар телдән-телгә күсеп, халҡыбыҙҙың күңел түрҙәрендә мәңгегә урын алған. Ҡәҙебәк Насир батыр тураһында йырҙар, легендалар халыҡ араһында әле булһа йәшәй. Көйөргәҙе районында, ул тыуған Төйләгән районында, Ырымбур өлкәһенең башҡа төбәктәрендә, хатта Урал аръяғында уның исеме менән бәйле ер-һыу атамалары әле лә бар.

[4] М.Буранғол. Башҡорт халыҡ йырҙарының тарихы һәм легендалары. I том, №49 (Өфө дәүләт сәнғәт институтының фольклор кабинетында һаҡлана)